# ХАЛҠЫМ МИРАҪЫ – ТӘРБИӘ НИГЕҘЕ

“Мөғжизәле, әкиәтле бала саҡ -
Уйындарҙа һәм уйҙарҙа ҡаласаҡ”

**Инеш:**

Фольклор – ул халыҡтың быуаттар буйы туплана килгән тормош тәжрибәһен, уның философик һәм эстетик ҡараштарын сағылдырған поэтик әҫәрҙәр:иртәктәр, ҡобайырҙар, мәҡәлдәр һәм әйтемдәр, йомаҡтар һәм бәйеттәр, йолалар һ.б. Фольклор халыҡтың һүҙ сәнғәтен, тарихын, тормош – көнкүрешен, уй – теләктәрен поэтиклаштергән гүзәл музыкаль – поэтик хазина ул. Был мираҫ борон – борондан халыҡтың рухи донъяһында төп урынды биләп торған һәм телдән – телгә, быуындан – быуынға изге аманат итеп тапшырыла килгән.Халыҡ өсөн ул, асылда, төп белем сығанағы булып та хеҙмәт иткән. Уның аша халыҡ үҙенең йыр – моңға күскән тарихы менән танышҡан, ата – бабаларҙан тапшырыла килгән яҙылмаған тормош тәжрибәһен һәм әхлаҡ нормаларын үҙләштергән, эстетик зауығын үҫтергән.Фольклор үҙенең тәбиғәте менән художестволы ижадтың, сәнғәттең төрлө төрҙәрен үҙендә туплаған ҡатмарлы ижад төрө.

**Актуаллелеге:**

Бөгөн, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, балалар араһында һәм ғөмүмән, халыҡ араһында элек – электән йәшәп килгән халыҡ йолалары онотола бара. Күптәр халыҡ йолалары, байрамдары тураһында әҙ белә. Был күренешкә, беренсенән, йәш быуындың халыҡ йола – байрамдарын белмәүҙәре, йәки аҙ кимәлдә үткәрелеүе, өйҙә күберәк заман технологияларына (телевизор, компьютер,гаджеттар) иғтибарҙы күберәк бүлеүҙәре, балалар баҡсаһында һәм мәктәптәрҙә фольклорҙы тейешле кимәлдә өйрәнмәү уның юғала барыуына сәбәпсе булып тора ла инде. Әлбиттә, бала төрлө яҡтан үҫешергә тейеш, әммә халыҡ йола – байрамдары беҙҙең иң ҡиммәтле мираҫтарыбыҙҙың береһе икәнлеген беҙ онотмаҫҡа бурыслыбыҙ.

**Проекттың төрө**: ижади-мәғлүмәт.

**Үткәреү ваҡыты**: оҙайлы.

**Проектта ҡатнашыусылар**: уртансылар, өлкәндәр, мәктәпкә әҙерлек төркөмдәре тәрбиәләнеүселәре, атай – әсәйҙәр (законлы вәкилдәр), педагогтар.

**Ҡыҫҡаса мәғлүмәт:** “Мөғжизәле, әкиәтле бала саҡ – уйындарҙа һәм уйҙарҙа ҡаласаҡ” – тип халыҡ юҡҡа әйтмәгәндер. Сөнки бала нимә ишетә, нимә күрә, нимә күҙәтә – барыһы ла уның телмәрендә туплана һәм хәтерендә ҡала.Йоҡлағанда бишек көйө, әкиәттәр һөйләүе, бейеткәндә таҡмаҡтар, һамаҡтар, мәҡәл – әйтемдәр, тиҙәйткестәр, һанашмаҡтар, ҡара – ҡаршы әйтештәр, милли байрамдарҙа йырҙар, бейеүҙәр баланың зиһенен арттыра, милләтенә, изге төйәгенә хөрмәт, ихтирам тойғоһо тәрбиәләй.Мәҫәлән, балаларҙы тәбиғәтте яратырға, ҡурсаларға өйрәтәбеҙ, ә тәбиғәттең матурлығын, гүзәллеген һәр миҙгелдә уҙғарылған байрамдар, йолалар, ғөрөф –

ғәзәттәр аша биреү уларҙың хәтерендә нығыраҡ урын биләй, сөнки улар барыһы ла беҙҙең ата – бабаларыбыҙҙың бай мираҫы.

**Маҡсат:**

-башҡорт фольклорын йола – байрамдар аша балалар баҡсаһында тейешле кимәлдә үҫтереү;

**Бурыстар:**

-башҡорт халҡының йола – байрамдары тураһында мәғлүмәт ҡабул итеү өсөн шарттар тыуҙырыу;

-балаларҙы, педагогтарҙы һәм атай – әсәйҙәрҙе башҡорт фольклоры, уның төрҙәре менән таныштырыу;

-халыҡ мәҙәниәтенә ҡарата һөйөү тәрбиәләү;

-балаларҙың бәйләнешле телмәрен үҫтереү, һүҙлек запасын байытыу;

-проектты тормошҡа ашырыу барышында ата - әсәләр менән әүҙем хеҙмәттәшлек итеү;

**Көтөлгән һөҙөмтә:**

-башҡорт халҡының йола – байрамдарын балаларҙың йәш үҙенсәлектәренә ҡарап, миҙгел һәм тәбиғәт үҙгәрештәрен иҫәпкә алып күңел асыу саралары үткәреү;

- халыҡтың уҙған тормошоноң, мәҙәниәтенең, көнкүрешенең йола – байрамдар аша күҙ алдына баҫтырылыуы;

- балаларҙың фольклор аша башҡорт халҡының әхлаҡи һәм рухи тормошона, үткәне һәм бөгөнгө йәшәйешенә хөрмәтле ҡарашлы булып тәрбиәләнеүе.

**Башҡа эшмәкәрлек төрҙәре менән бәйләнеш:**

-Тирә – йүн менән таныштырыу

-Һүрәтләү эшмәкәрлеге

-Уйын эшмәкәрлеге

-Нәфис әҙәбиәт уҡыу

-Физик үҫеш

-Хеҙмәт эшмәкәрлеге

-Эҙләнеү – тикшеренеү эшмәкәрлеге

-Художестволы ижад эшмәкәрлеге

**Эш формалары һәм алымдары:**

Тематик музыка ойоштороу эшмәкәрлектәре, презентация, әңгәмә, ситуациялар, шиғырҙар,һынашмаҡтар, телтәҙәйткестәр, мәҡәл – әйтемдәр, йомаҡтар ятлау, түңәрәк һәм хәрәкәт уйындары, күҙәтеүҙәр, әҙәби әҫәрҙәр уҡыу, сюжетлы - ролле, дидактик уйындар, иллюстрациялар ҡарау.

**Эшләү өсөн нигеҙ:**

-проект оҙайлы ваҡыт эсендә конкрет һөҙөмтәләргә ирешеү мөмкинселеге бирә;

-проектты тормошҡа ашырыуҙа балалар, ата - әсәләр һәм педагогтарҙың әүҙем ҡатнашыуын тәьмин итә;

-проектты тормошҡа ашырыу уртаҡ эшмәкәрлек сиктәрендә мөмкин;

**Әҙерлек этабы:**

-йола – байрамдар темаһына ярашлы әҙәбиәт, иллюстрациялар, картиналар, слайд, аудио, видеояҙмалар туплау;

-проект темаһы буйынса балалар әҙәбиәте һайлау;
-башҡорт халыҡының фольклорына ҡағылышлы материалдар туплау,сценарийҙар әҙерләү;
**Проекттың йөкмәткеһе:**
-башҡорт мәҙәниәтен, йола - байрамдарын өйрәнеү буйынса ойоштороу эшмәкәрлектәре үткәреү;
-балаларҙың ижади эшмәкәрлеген ойоштороу: уйын, нәфис әҙәбиәт уҡыу, ятлау, һүрәт төшөрөү, аппликация;
-балалар, ата - әсәйҙәр менән берлектә коллектив эш: "Башҡорт халҡының көнкүреше";
-балаларҙы, педагогтарҙы һәм ата - әсәләрҙе "Башҡорт халҡының көнкүреше"н йыйһазландырыу өсөн материалдар туплауға йәлеп итеү;
**Проект тормошҡа ашырыу:**
I этап. Әҙерлек этабы:
-мәғлүмәт, методик әҙәбиәт туплау;
-педагогтарға мәғлүмәт биреү;

| № | Тема | Тормошҡа ашырыу юлы | Үтәү ваҡыты |
|---|---|---|---|
| 1 | Халыҡ фольклоры һәм уның әһәмиәте | Педагогтар өсөн консультация | Апрель |
| 2 | Фольклор – халыҡ хазинаһы | Атай – әсәйҙәр өсөн консультация | Апрель |
| 3 | Онотолған йола – байрамдар тураһында мәғлүмәт биреү | Фольклорҙың әһәмиәте, тарихы һәм файҙаһы тураһында әңгәмә | Май |
| 4 | Башҡорт халҡының көнкүрешен йыйһазландырыу буйынса материалдар туплау | Эҙләнеү – тикшеренеү | Июнь – июль |
| 5 | Йола – байрамдарға атрибуттар әҙерләү | Милли кейемдәр, һауыт – һабалар, башҡорт халҡының милли музыка ҡоралдарын йыуыу | Июль - август |

II этап. Проектты тормошҡа ашырыу.

Балалар, педагогтар, атай – әсәйҙәр менән йола – байрамдар өйрәнеү

| № | **Йәш төркөмө (Возрастная группа)** | **Йөкмәткеһе** | **Тормошка ашырыу юлы** | **Үтәү вакыты** |
|---|---|---|---|---|
| **1** | Уртансылар төркөмө | Йола – байрамдар | “Ҡурмас байрамы” | Сентябрь – Ноябрь |
| | | | “Нардуған” | Декабрь – февраль |
| | | | “Ҡарға бутҡаһы” | Март – май |
| **2** | Өлкәндәр төркөмө | Йола – байрамдар | “Сөмбөлә килде беҙгә” | Сентябрь – ноябрь |
| | | | “Кейеҙ баҫыу” | Декабрь – февраль |
| | | | “Науруз” | Март - май |
| **3** | Мәктәпкә әҙерлек төркөмө | Йола – байрамдар | “Ҡаҙ өмәһе” | Сентябрь – ноябрь |
| | | | “Исем туйы” | Декабрь – февралшь |
| | | | “Һабантуй” | Март – май |
| **4** | Халҡым мираҫы – тәрбиә нигеҙе | Балалар. Педагогтар, атай - әсәйҙәр | Оҫталыҡ класы | 2024 йыл, май |